ПУБЛИЦИСТИКА

*Салауат* ***ХӨСӘЙЕНОВ***

# “Әҙәм, икән, шулай итеп нужа күрә...”

## (Бөйөк Ватан һуғышында әсир төшкән башҡорт һалдатының шиғри яҙмаһы)

Донъялағы ҙур сәйәси тетрәнеүҙәр һәм һуғыштар башҡорт халҡын да ситләтеп үтмәгән. Улай ғына ла түгел, халыҡ уларға туранан-тура йәлеп ителгән һәм был ваҡиғаларҙың уртаһында ҡайнаған. Һөҙөмтәлә, халҡыбыҙҙың тарихи хәтеренә был ваҡиғалар тәрән уйылған.

Билдәле булыуынса, хәрби тематика фольклорҙа һәм яҙма ҡомартҡыларҙа киң сағылған. Уларҙы йыйыу һәм өйрәнеү йүнәлешендә байтаҡ эш башҡарылған. Әммә, мәғлүм булыуынса, тоталитаризм дәүерендә идеологик сәбәптәр арҡаһында тик рәсми ҡарашҡа тап килгән яҙма мираҫ ҡына тикшерелде. Был айсбергтың өҫкө, күренгән өлөшөн генә хәтерләтә. Ошо бөйөк тетрәнеүҙәр заманында барлыҡҡа килгән ябай халыҡ вәкилдәре ижады, шул иҫәптән башҡорт яугирҙары ижады, әлегәсә өйрәнелмәгән өлкә булып ҡала килә. Фәҡәт һуңғы ваҡыттарҙа уларға күпмелер иғтибар ителә башланы. Был тәңгәлдә Ә.Сәлихов һәм З.Рәимғужинаның «Ватандаш» журналында 1998 йыл баҫылып сыҡҡан «Башҡорт әсирҙәренең йырҙары»[1] мәҡәләһен, Ә.Сәлиховтың 2003 йылда донъя күргән «Онотолған тарих биттәре» китабын, беҙҙең тарафтан 2014 йылдың июнендә Әхнәф Харисовтың тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған конференция материалдары йыйынтығына индерелгән «Дәһшәтле йылдарҙа күңелдәрҙе ярып сыҡҡан юлдар, йәки ҡала килгән «аҡ таптар»[2] тигән мәҡәләне атарға була.

Ижади һәләткә эйә булған ябай һалдаттар фронтта саҡта күңелдәрендә тыуған шиғырҙарын ҡағыҙға, уларҙы туғандарына яҙған хаттарында теркәгән. Шундай бер шиғри яҙманы беҙҙең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына бер нисә йыл элек Бишева Сажиҙә Рәшит ҡыҙы тапшырҙы. Был ҡомартҡы Ишмөхәммәт Йосопов тигән кешенең ҡуйын дәфтәре булып сыҡты. Ул фин кампанияһында, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша, пленда була. Дәфтәрҙә автор үҙенең әсирҙә саҡта булған ғазаптарын һәм кисерештәрен шиғри юлдарға һалған. Был әҫәр шиғриәт ҡанундарын ярайһы ғына үҙләштергән шәхес тарафынан яҙылғанға оҡшай. Уның почеркы ла килешле, яҙыуға күнеккән кешенекенә хас.

Ишмөхәммәт Йосопов Һарытау өлкәһе Перелюб районы Ҡунаҡбай ауылында тыуып үҫкән һәм шунан һуғышҡа киткән. Уның әҫәре 12 ижекле силлабик шиғырға нигеҙләнгән. Ундай шиғыр үлсәме традицион төрки һәм көнсығыш

---

[1] *Сәлихов Ә., Рәимъужина З.* Башҡорт әсирҙәренең йырҙары. // Ватандаш, 1998, №4.

[2] *Хөсәйенов С.М.* Дәһшәтле йылдарҙа күңелдәрҙе ярып сыҡҡан юлдар, йәки ҡала килгән “аҡ таптар”. // Әхнәф Харисов һәм башҡорт филологияһының көнүҙәк мәсьәләләре (ғалимдың тыуыуына 100 йыл тулыуына ҡарата). Өфө, 20 июнь, 2014 й.

яҙма шиғриәтенә хас. Был факт авторҙың Урта быуаттарҙан килгән рухи мәҙәниәт менән ниндәйҙер кимәлдә таныш булғанын иҫбатлай. Текстологик яҡтан тикшергәндә, беренсе осраҡта уның тел үҙенселектәре күҙгә ташлана. Шиғыр төрки яҙма традициялары таралған осорҙа барлыҡҡа килгән күренешкә хас телдә — татар һәм башҡорт телдәрен һәм уларҙың диалекттары өлгөләрен ҡатыштырған телдә яҙылған. Унда ҡаҙаҡ теленә оҡшаш элементтар ҙа осрай. Шиғырҙың башындағы ике юл түбәндәгесә башлана:

«Жылы булса мең туғыз йөз ҡырыҡ ике,
Жатҡан урын Ҡырымдағы Кереч иде».

Бындай рәүештә яҙыу хәҙерге ҡаҙаҡ әҙәби телендә норма һанала. Әммә шиғырҙа башҡа бер ниндәй ҙә ҡаҙаҡ теле элементтары осрамай. 12-се строфаның 2-се юлында «Бер аздан суң яуа ямғыр өстөбөзгә», — тиелә. Бында «ямғыр» башҡорт әҙәби телендәгесә яҙыла. Төрки телендә ул «яғмур», татар телендә «яңғыр» булыр ине. 20-се строфаның өсөнсө юлы «Шул кәртәлә утырдыҡ без хәлсезлектән», — тип башлана. Бында ла «кәртәлә» һүҙе башҡорт әҙәби теле нормаһына яраҡлы рәүештә яҙылған. 21-се дүрт юллыҡтың 3-сө юлында былай тиелгән: «Утырдыҡ та бер мөйөшкә уның белән». «Мөйөшкә» һәм «уның» тигән һүҙҙәр ҙә хәҙерге башҡорт әҙәби телендәгесә яҙылған. 22-се дүрт юллыҡта ла:

«Бер котелок жыйыб уны тутырдыҡ та
Утырдыҡ без бешерергә уны утҡа»,

— тигәндә «бешерергә уны» һүҙе башҡортса яҙылған. Юғарыла килтерелгән үрнәктәр был юлдарҙың авторы башҡорт булыуын, әммә заманында белемде иҫке төрки һәм татар телдәрендә алғанлығын күрһәтә. Уның йыш ҡына әҙәби татар теле нормаһынан ситкә сығып һәм башҡорт теленең элементтарын ҡушып яҙыуы бик тә тәбиғи. Элегерәк мәҙрәсәлә уҡығанға күрә, ул утыҙынсы йылдарҙа ҡулланыуға индерелгән латин яҙмаһын белмәй һәм уның менән файҙаланмай.

Автор Ҡырымда барған аяуһыҙ һуғышты тасуирлай. Артабан үҙенең әсиргә эләгеүен һәм тотҡонлоҡтағы хәл-әхүәлдәрҙе бәйән итә. Һуғышты ошо рәүешле һүрәтләү — әҙәбиәттә бик һирәк күренеш. Сөнки ВГК Ставкаһының 270 номер аҫтындағы фарманындағы (1941 й., 16 август) 1-се пунктта шулай тиелә: «Тыл яғына дезертирлыҡ ҡылған, йәки дошманға пленға бирелгән командирҙарҙы һәм политработниктарҙы енәйәтсе, дезертир тип иҫәпләргә, уларҙың ғаиләләрен, присяганы боҙған һәм Ватанға хыянат иткән дезертирҙар ғаиләләре тип, ҡулға алырға»[3]. Шул уҡ фармандың 2-се пунктында «Дошманға ҡарай ҡаршылашыуҙан уға пленға төшөүҙе хуп күргән красноармеецтарҙы төрлө саралар менән юҡ итергә, ә пленға эләккән красноармеецтарҙың ғаиләләрен дәүләт пособиеларынан һәм ярҙамынан мәхрүм итергә»[4], — тиелгән.

Шундай күрһәтмә булғанлыҡтан, әсиргә төшөү темаһын күпселек авторҙар ситләтеп уҙған. Был тема әҙәбиәттә һаман «аҡ тап» булып ҡала килә. Түбәндә тәҡдим ителгән яҙманың бик үҙенсәлекле һәм һирәк осрай торған шиғри ҡомартҡы икәнлегенә шик юҡ.

---

[3] *Островский В.П., Уткин А.И.* История России (11 класс). М., 1997. 259-сы б.
[4] Шунда уҡ, 260-сы б.

## Пленда*

Йылы булһа мең туғыҙ йөҙ ҡырҡ ике,
Ятҡан урын Ҡырымдағы Кереч ине.
Айы булһа, тик матур ай — исеме май —
Беҙҙең ғәскәр оборона тота ине.

Сыҙаманы беҙҙең ғәскәр, сигә бирҙе,
Нимес иһә һәр көн яҡын килә бирҙе.
Улар беҙҙе урап алған булған икән:
Беҙҙең ғәскәр ун бишендә генә белде.

Атакаға барҙыҡ ун алтынсы көнөн,
Уҡ, снаряд харап итте йөҙҙө, меңде.
Көн ҡап-ҡара, ҡаплап алған ҡара төтөн,
Күҙҙәр тонған, беләлмайым көнөн, төнөн.

Июлдең бишендә төштөк тотҡонлоҡҡа,
Ҡаршы атҡан дошманға йотҡонлоҡҡа.
Шул көндән үк аҡ таң беҙгә атмаҫ булды,
Ташланылар ҡара төпһөҙ упҡынлыҡҡа.

Ярты көнгә ҡырҡ саҡрым йәйәү барҙыҡ,
Аслыҡтан һәм һыуһыҙлыҡтан хәлдән тайҙыҡ.
Йөрөй алмайбыҙ, баш әйләнә, күҙҙәрҙә йәш,
Артҡа ҡалһаҡ, полицайҙан таяҡ алдыҡ.

Күп кенәләр бара алмайса хәлдән тайҙы,
Ятты ергә тора алмайса, шунда ҡалды.
Ҡалдырмайса тыныс ҡына йән бирергә,
Полицайҙар таяҡ менән йәнен алды.

Яҙған микән яҙмыш быларға үлергә,
Йөрәк әрней, был хәлгә нисек түҙергә.
Ишетмәйҙәр беҙҙең теләк, ялбарыуҙы,
Туҡтатмайҙар ҡәберен ҡаҙып күмергә.

Киң сәхрәләр үлек менән биҙәкләнде,
Бер көн үткәс, сафтарыбыҙ һирәкләнде.
Шул хәлдәрҙе күрәбеҙ ҙә һыҡранабыҙ,
Өҙгөләне зәғиф булған йөрәктәрҙе.

Төн булғанда тултыралар зыяратҡа,
Һалдат ҡуйып мылтыҡ менән төрлө яҡҡа.
Бер һыуыҡтан, бер ҡурҡыуҙан ҡалтырайбыҙ,
Йоҡо алмай бер яғынан ҡарын асҡа.

---

* (Әҫәр хәҙерге башҡорт әҙәби телендә бирелде. — ***С.Х.***)

Уйланабыҙ — иртән микән атырҙар, тип,
Ҡүмгәндәр инде тыныс яталар, тиеп.
Эй, хоҙайым, ниңә һалдың был ғазапҡа,
Әллә баштан үтте микән хаталар, тип.

Таң алдынан килде һалдат тағы бик күп,
Менгән аты ҡара туры һәм тимер күк.
Алып китте: «Марш!» — тип, юлға һалып,
Йөрөй алмайбыҙ — елкәбеҙҙә ауырҙыр йөк.

Бер яғынан ҡояш та бик ҡыҙҙыра,
Йөрәк майын рәхимһеҙ хәлдә һыҙҙыра.
Бер аҙҙан һуң яуа ямғыр өҫтөбөҙгә,
Бер аҙҙан беҙгә һалҡын ел һыҙғыра.

Үлгәндәрҙе юлға ташлап ҡалдыралар,
Уның йөгөн башҡаларҙан алдыралар.
Ауылдарҙа: «Һыу бир», — тип ҡулды һуҙһаҡ,
Полицайҙар ҡулыбыҙҙы алдыралар.

Ҡырҡ саҡрым йөрөп, тағы ла бер туҡтаныҡ,
Һаҫы күлдең һыуҙарынан бер уртланыҡ.
Хәлдән тайҙыҡ тамам инде, көс ҡалманы,
Һалҡын ергә ултырҙыҡ та беҙ йоҡланыҡ.

Уй шул: «Һаҡсы көтөр микән беҙҙе оҙаҡ,
Был аслыҡтан булыр микән сыҙап?»
Шунда ята күп кешеләр астан үлеп,
Ҡайһылар ҡысҡыралар шунда йығылып.

Оҙаҡ беҙгә ял итергә бирмәнеләр,
Ас меҫкендәрҙең хәлдәрен дә белмәнеләр.
Астан үлгән иптәштәрҙең кәүҙәләрен
Күмеп китеү рөхсәтен дә бирмәнеләр.

Ҡыҙаралыр ҡояшы ла менеп күктә,
Тир ағалыр, ҡоро ер юҡ бер бөртөк тә.
Бер яғынан туҙан беҙҙе ҡаплап ала,
Юлы ҡоро, икенсенән халыҡ күпкә.

Һыуһыҙлыҡтан ике сутка сабыр иттек,
Нисә төрлө йәшел үлән һығып эстек.
Осрағанда тоҙло булған күлдең һыуын
Шатланышып, лимонадтай күреп эстек.

Ашаныҡ беҙ алабута үләндәрен,
Күрҙек шунда үлән ашап үлгәндәрен.
Эй, хоҙайым, күрһәтмә, тип, башҡаларға
Был хәлдәрҙе, беҙ бәхетһеҙ, күргәндәргә.

Ҡерҙек беҙ Мәркфә ауылы уртаһына,
Тултырҙылар беҙҙе малдар кәртәһенә.
Шул кәртәлә ултырҙыҡ беҙ хәлһеҙлектән,
Ҡарамайса бысрағына, таҙаһына.

Осраштыҡ шунда ҡайнаға Минйәр менән,
Шатландыҡ күрешеп ҡатҡан ҡулдар менән.
Ултырҙыҡ та бер мөйөшкә уның менән,
Һөйләштек бик оҙаҡ уҙған көндәр менән.

Һүҙҙәр бөткәс, урып йыйҙыҡ алабута,
Уйланыҡ беҙ бешерергә үлән бутҡа.
Бер котелок йыйып уны тултырҙыҡ та
Ултырттыҡ беҙ бешерергә уны утҡа.

Бер ваҡытты аңлаттылар «аш була», — тип,
«Аҡса алмайбыҙ, барсағыҙға буш була», — тип.
Ышанмайбыҙ, беҙгә ҡайҙан аш етһен һуң,
Ас кешелә туйыр хәл дә төш була, тип.

Ҡайнаға әйтә: «Унда бик ҙур ҡаҙандар бар,
Өҫтәренән сығып тора тәмле парҙар».
Хәбәр килде: «Теҙелегеҙ сиратҡа, — тип —
Аш алырға ниндәй булһа һауыт алып».

Сират етте иптәш менән икебеҙгә,
Аш биреүсе бер ҡараны битебеҙгә.
Бер котелок тулы итеп һалып биреп,
Һуңынан әйтте: «Бына ошо икегеҙгә».

Әйткән икән хоҙай беҙгә «үлмәһен», тип,
Итәк тотам ҡайнаға ашты түкмәһен, тип.
Ҡайһы әйтә: «Ашамағыҙ ашығып, — ти, —
Ҡапыл ашап, эстәрегеҙ күпмәһен», — тип.

Аш тигәне боламыҡ инде, нисек тимәк,
Ҡайнар һыуға болғатҡандар онһоҙ кәбәк.
Беҙҙең илдә аҡса биреп эҙләһәң дә,
Таба алмаҫһың ундай яуыз эре иләк.

Бер ҡаҙанға икән ашыбыҙ башы буламын,
Ике асҡа бер котелок аш бүләмен.
Бер валсыҡ та ризыҡ ҡалмаған кешенең
Ул аш менән күңелдәре хуш буламы?

Ни булһа ла, ҡайнар һурпа эскә китте,
Бер аҙға ғына хәлдәрҙе лә еңеләйтте.
«Ятығыҙ ҙа йоҡлағыҙ, — тип, — барығыҙ ҙа», —
Бер полицай юғарыға сығып әйтте.

Бер аҙҙан һуң кәбәк эстә бик күперә,
Нисә төрлө тауыш менән эс үкерә.
Сыҙай алмай ҡай берәүҙәр ауыртҡанға,
«Ниңә ашаным был кәбәкте», — тип үкенә.

Күреп шул көндә нисә төрлө бәләләрҙе,
Үтеп сыҡтыҡ матур сәхрә далаларҙы.
Ҡыуып йөрөй урам буйлап полицайҙар
«Икмәк бирәм», — тип сыҡҡан балаларҙы.

Алдыбыҙҙа бер ауыл бар, өйҙәре һирәк,
Был ауылдың исеме икән Ислам Тирәк.
Кис булғанда, ятығыҙ, тиҙәр ер далаға,
Ҡәртә буйлап һаҡсы ҡуйып һирәк-һирәк.

Иртә торһаҡ, ятҡан урын булған ҡоро,
Лагерь бик ҙур, халыҡтың юҡ осо-ҡыры.
Бында икән полицайҙар хөкөм һөрә,
Телем икмәк күрһәтә лә сәғәт һорай.

Яҡшы булһа, итектәрен һалдыралар,
Ярты икмәккә гел яланғас ҡалдыралар.
Ҡаршы торһа, таяҡ менән ҡыйнап, ҡыйнап,
Башҡаларҙан бер кейемен һалдыралар.

Бында беҙгә аш бирәләр көнөнә бер,
Насар түгел, хурлы ҡалһаң, булыр көфүр (*насар*. — ***С.Х.***)
Әммә ләкин аҙ күренә беҙҙең күҙгә
Өс кешегә бер котелок ҙурға булыр.

Көнөнә бер икмәген дә биреп торҙо,
Үлсәгәндә йөҙ грамдар булыр ине.
Өс кешенең порцияһын берәү алһа,
Бәлки, шунда яртылата туйыр ине.

Үҙ-арала китте шунда сауҙа,
Эҙләмәйҙер һис кем инде бында файҙа.
Нәмә һатып йәнен һаҡлап ала ҡалһа,
Шунан артыҡ бәхет инде уға ҡайҙа.

Ҡай берҙәре төшкән бик күп аҡса менән,
Ҡай берҙәре отоп алған кәрттәр менән.
Дүрт йөҙ грамм әпәй тора алты йөҙ һум,
Был хәлдәрҙе беҙҙең баштар ҡасан күргән.

Илле һумдан артыҡ түгел минең аҡсам,
Алыр инем бер печенье, әгәр тапһам.
Үҙем уйлайым, алыр инем мин дә әпәй,
Шул аҡсаға өҫтәп күлмәгемде һатһам.

Көндән-көндән күрмәйбеҙ ҙә матур йәйҙе,
Лагерь шаулай, әйтерһең, ҙур ҡаҙан ҡайнай.
Баҙарҙар ҙур — берәү ала, берәү һата,
Бәхетлеләр бергә-бергә икмәк сәйнәй.

Ҡиҫкеләнде йөрәккәйем, ҡарыным ас,
Ләкин булмай әпәй, аҡса ла булмағас.
Уйлайым мин: «Алып тартайым тәмәке», — тип,
Был аҡсаға ашар нәмә таба алмағас.

Тәмәкеһен һатыусыны алдым көтөп,
«Күрһәт, — тим, — ҡағыҙыңдан миңә һүтеп».
«Илле һумға бир», — тигәнгә ике тартым,
Әзербайжан китте тороп, мине һүгеп.

Уйланым мин: «Уйнап ҡарайым бөгөн кәрттә,
Ҡай берәүҙең кәрттә уйнап, бәхете арта».
Унды отоп егерме һум отторғанмын —
Булмай икән, бер бәхетең китһә артҡа.

Ҡалған аҡсам хәҙер инде нәҡ утыҙ һум,
Отторғанға ҡайғырышты яҡын дуҫым.
Бер тартырлыҡ сын махорка һатып алып,
Икәү тартайыҡ, тим, инде был да бөтһөн.

Әҙәм, икән, шулай итеп нужа күрә,
Бөтөн тәндә рәхимһеҙ быуындар бөрә.
Баштан-аяҡ буялғанбыҙ бысраҡҡа,
Айҙар буйы йыуынманыҡ һыуы юҡҡа.

Һаҡал, мыйыҡ, сәстәр еткән беҙҙең үҫеп,
Беттәр ашай, һис тә булмай быға түҙеп.
Ятҡан ерҙән тороп булмай, баш әйләнә,
Һәр кем ашау тураһында тик уйлана.

Был лагерҙа бер ҡойо бар, ауыҙы асыҡ,
Әйләнәһен урап алған тимер сыбыҡ.
Һыу алырға барған меҫкен пленный,
Полицайҙар шунда ҡыйнай, һуғып йығып.

Йәшәү өсөн һәр кем инде бер юл эҙләй,
Хәле бары көнө буйы ҡойо күҙләй.
Тирәһендә мылтыҡ тотҡан һаҡсылары
Бары румын, полицай ҙа һалҡын йөҙлө.

Йөрәклеләр, ҡыйнаһа ла, барып ала,
Аҡсалылар шул кешенән һатып ала.
Хәлдән тайған бисаралар, аҡсаһыҙҙар
Бер көн түгел, өс көн рәттән һыуһыҙ ҡала.

Утыҙ һумға булыр микән бер стакан,
Башынан тамып тора ҡып-ҡыҙыл ҡан.
Бисараны ҡыйнағандар һыу янында
Мылтыҡ тотҡан, көслө булған полицайҙар.

Бит, ҡул йыуыу беҙҙең өсөн кәрәк түгел,
Беҙҙең кеүек бысраҡтар һирәк түгел.
Эсер өсөн һыу алырға ниәт итеп,
Минең иптәш силәк алып китте бер көн.

Румын һалдат һыу алырға рөхсәт биргән,
Ҡыуанған да минең иптәш, эскә кергән.
Һыуын алып кире сығып килгән ваҡыт,
Икенсеһе быны ситтән ҡарап торған.

Уйламаған иптәш бында ҡыйналыуын,
Бит-башының ҡара ҡанға буялыуын.
Ҡарамаған — румын һалдат яҡын ғына,
Сәнскеле тимер сыбыҡтарға уралыуын.

Башын бөгә инде иптәш, сығайым, тип,
Алған һыуҙы иптәш менән бүләйем, тип.
Ҡилеп етеп, румын һалдат һуғып йыға,
Пленныйҙың бер ҡыҙығын күрәйем, тип.

Аяҡ, ҡулын урап алған тимер сыбыҡ,
Румын иһә хәлһеҙ итә быны һуғып.
Ҡөлә-көлә туҡмай быны приклад менән,
Тынһыҙ ҡалғас, китә ташлап, көслө булып.

Ҡилде иптәш үҙ кәүҙәһен көскә һөйрәп,
Хәл-әхүәлен белеп алдым мин дә һорап.
Йөҙ түбәндән ятты меҫкен еүеш ергә,
Тын алалмай, балаларҙай үкһеп илап.

Һыу ҡайғыһы китте баштан, быны күреп,
Сараң юҡ бит, ултыраһың теҙгә сүгеп.
Аслыҡтан да, һыуһыҙлыҡтан, туҡмалғандан
Бик күп булды ҡалыусылар шунда үлеп.

Аслыҡ, мәғлүм, дуҫ түгелдер әҙәм менән —
Батыр егет шул ерҙә лә көнөн күрә.
Туҡмалғандан минең иптәш икенсе көн
Үҙ кәүҙәһен көскә генә һөйрәп йөрөй.

Етмәй һауыт ашхананан аш алырға,
Һәр кем әҙер котелокка баш алырға.
Ҡитте иптәш котелоктар йыйып алып,
Барыусылар артылына баш булырға.

Былар тора көтөп кеше ашағанын,
Ашап алғас, котелогы бушағанын.
Тартып алып ҡулындағы котелогын,
Туҡмап китте ҡаршы һүҙгә башлағанын.

Иптәш киткәс, мин ултырам урын һаҡлап,
Икебеҙҙең әйберҙәрҙе бер ҡосаҡлап.
Иптәш килә кис булғанда арып-талып,
Ерҙә ятҡан кешеләрҙән атлап-атлап.

Хеҙмәт хаҡын яҡшы ғына төшөргәндәр,
Макарондар һалып, туң аш биргәндәр.
Икмәге лә бар ҡулында ике телем,
Арыған үҙе, ҡара тиргә төшөргәндәр.

Аҙ булһа ла, ашаманы ул үҙе генә,
Миңә лә ул, аша, тип үҙе менән,
Йылыта ул минең һалҡын күкрәгемде,
Яҡын күреп тәмле, йылы һүҙе менән.

Өс аҙнанан башланылар беҙҙе бүлә —
Әҙерләнгән китеүселәр уйнай, көлә.
Ҡасан, тимен, беҙҙе инде оҙатырҙар,
Унынһын инде бер хоҙайым үҙе белә.

Оҙаталар украинецты, беларусты,
Был көндәрҙә осратманым Ягур (*Егор.* — ***С.Х.***) дуҫты.
Былар менән беҙ ҙә бергә китер инек,
Полицайға ҡушылырға беҙгә ҡушты.

Иптәш әйтә: «Китергә лагерҙа бар юл:
Һиндә, миндә урыҫтың ғилеме бар.
Бөгөндән һуң һөйләшәйек урыҫса ғына,
Мин — Михаил, һин, булһаң, Александр бул».

Шулай итеп бер ниәткә беҙ башланыҡ,
Ысын исемде, әсә телен беҙ ташланыҡ.
Был эштән дә бер нәтижә лә сыҡманы,
Урыҫтарҙы ебәреү ҙә шып туҡтаны.

Башланылар былар ебәрергә кавказдарҙы,
Был ике дуҫ телде тағы бер тешләне.
Ҡавказдарҙың араһына беҙ һыймайбыҙ,
Ҡавказ телен бер ауыҙ ҙа һүҙ белмәйбеҙ.

Һананылар барсабыҙҙы бергә теҙеп,
Бер офицер китте ҡарап беҙҙе уҙып.
Алып китеп беҙҙе яҡын станцияға,
Ултырттылар вагондарға тығыҙ итеп.

Тәҙрәгә ныҡлы рәшәткәләр ҡаҡтылар,
Ишектәрҙе йоҙаҡ менән нығыттылар.
Һәр кем үҙе яҡын күргән дуҫы менән
Бер-береһенә башын ҡуйып яттылар.

Беҙҙең уйҙы бер хоҙайым үҙе белә,
Әҙәм шулай нисә төрлө михнәт күрә,
Барлыҡ кеше тәрәттәрҙе (*тәбиғи ихтыяж.* — ***С. Х.***) шунда үтәп,
Ташлай барҙыҡ тәҙрәнән гәзит менән.

Ашар нәмә биргеләйҙәр һирәк-һирәк,
Йәшәр өсөн әҙәмгә бит һыу ҙа кәрәк.
Һыу бирмәйҙәр, вагон эсе ҡыҙып китте —
Ахирәттә бындай тамуғ булыр һирәк.

Станцияға төшөрҙөләр, Харьков, тиеп,
Саф һауаны беҙ һулайбыҙ ҙур-ҙур итеп.
Килгән саҡта үлеп ҡалған йөҙләп кеше
Түҙә алмай, әжәлдәре шунда етеп.

Шул көн беҙҙе тултырҙылар бер лагерға,
Күрмәгәнбеҙ бындай лагерь һис бер ерҙә.
Пленныйҙың юҡтыр, бәлки, һан-хисабы,
Йөҙ гектарҙы ҡаплар ине, теҙһәң бергә.

Тултырғандар өсәр ҡатлы биналарға,
Буш урын юҡ бөгөн килгән яңыларға.
Нисә ҡабат һуғыш, тентеү алғандан һуң
Мал урынына урынлаштыҡ бер далаға.

Еткән халыҡтың сәс-һаҡалы, өҫтө керле,
Ябыҡҡан ул, көскә йөрөй, һары йөҙлө.
Һулағанда төтөн сыға ауыҙынан,
Үҙ кәүҙәһен тота алмай, моңло күҙле.

Поварҙар ҡыҙыл йөҙлө, таҙа тәнле,
Борсаҡ ашы шундай һәйбәт, шундай тәмле.
Өйҙә ваҡыт ит, ҡоймаҡтар ашағанда
Белмәйем мин, булды микән шундай тәмле?

Әммә ләкин аштарында ниҙер етмәй,
Әллә инде, тоҙ һалһалар, борсаҡ бешмәй.
Борсаҡтар ҡайһы серегән, ҡайһы үргән —
Ярай әле, эскә киткәс, эстә үҫмәй.

Яуа ямғыр, ятыр өсөн урын юҡ,
Иптәш ауырый, эсе китә, кәйефе юҡ.
Ашай алмай биргән борсаҡ һурпаһын да,
Йөҙө һары, ауыҙында бер тәме юҡ.

Һуғыш-талаш, хәйлә менән һыу килтерәм,
Ут яҡтым да ҡалай менән һыу ултырттым.
Ҡай саҡтағы ҡара сәйҙе ҡайнатам да,
Шифа булһын, тип иптәшкә мин эсерәм.

Ҡалған икән ҡапсығымда бер аҙ арыш,
Ул күп түгел, ҡулға алһаң, булыр бер ус.
Ҡайнаттым да: «Иптәш, — тинем, — һин шуны эс».
Иптәш хаҡы, уны ҡарау миңә бурыс.

Иптәш әйтә: «Тапһаң ине ҡара борос,
Араҡыға һалһаң ине бер ярты ус.
Минең ҡатын ҡарай ине шулай итеп,
Ҡай бер ваҡыт өйҙә саҡта ауыртһа эс...»

Фәнни хеҙмәттәрҙә, масса-күләм информация сараларында һәм әҙәби ижадта был темаға ҡағылыуҙы тыйыу — йәмғиәттә һәм ижтимағи фекерҙә илдең юғары хакимиәт ағзаларының үҙҙәренә һүҙ тейҙермәҫкә тырышыуынан да килгәндер. Сөнки яугирҙар әсирлеккә үҙ ғәйептәре арҡаһында түгел, ә командованиеның хәрби операцияларҙы әҙерләгәндәге хаталары арҡаһында эләгә. Был сетерекле проблемаға ҡараш тик һуңғы йылдарҙа ғына үҙгәрҙе. «Билдәлелек» осоронда башланған был хәрәкәт СССР тарҡалғандан һуң элекке күп кенә тыйыуҙарҙы юҡҡа сығарҙы. Уҙған быуаттың 90-сы йылдарында мәктәп дәреслектәрендә лә инде тарихи дөрөҫлөк күрһәтелә башланы. Мәҫәлән, В.П.Островский һәм А.И.Уткин әҙерләгән 11-се синыф өсөн «История России» дәреслегендә «Дәлилләнмәгән ҡарарҙар» тигән бүлек бар. Был бүлектә Ҡырымдағы фажиғәгә лә урын бирелгән. Унда былай тиелгән: «Апрель аҙағында беҙҙең ғәскәрҙең Ҡырымдағы баҫымы уңышһыҙ тамамланды. Уны башлар алдынан Ҡырым фронты дошман менән сағыштырғанда билдәле материаль өҫтөнлөк тота ине. Әммә фронт командованиеһы ғәскәрҙе немец-фашист ғәскәрҙәре позицияларына бик яҡын күсерҙе. Генерал Манштейн, мәлде дөрөҫ һайлап, күп һанлы авиацияны хәрәкәткә индереп, совет ғәскәрҙәренең оборонаһын боҙҙо. Ҡырым фронты ысынында тар-мар ителде». Былдай хаталы операциянан һуң күп совет һалдаттарының пленға эләгеүе тәбиғи. Беренсе осраҡта, был командованиеның үҙ ғәйебе. Шуның өсөн беҙ шул ваҡиғаларға һәм шул осорҙо тасуир иткән ябай һалдаттың шиғри яҙмаларына хәҙерге заман бейеклегенән ҡарарға һәм баһа бирергә бурыслыбыҙ. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, был ижад өлгөһө ни сәбәптәндер тамамланмай ҡалған. Шулай ҙа был уның әһәмиәтен кәметмәй һәм халыҡҡа еткереүгә лайыҡ икәнен күрһәтә.